*Рәсимә УРАҠСИНА,*
*филология фәндәре кандидаты*

# Рухи именлек һаҡсыһы

Башҡорт балаһы үҙ телендә китап тотоп рәхәтләнеп уҡып ултырһын ине тигән хыял кемде генә ҡулына ҡәләм тоторға мәжбүр итмәгән икән? Балалар әҙәбиәте менән шөғөлләнеү өсөн айырым шәхсән сифаттар кәрәк. Хәҙерге көндә киң билдәле шағирә, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт, Рәми Ғарипов исемендәге премиялар лауреаты, Башҡортостандың һәм Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Факиһа Туғыҙбаеваның ижады ла, яҙмышы ла бына утыҙ йылдан ашыу Башҡортостан балаларының рухи донъяһы менән бәйле.

Факиһа Туғыҙбаева талантлы лирик шағирә һәм балалар әҙәбиәтен һәм матбуғатын оҫта ойоштороусы ғына түгел, ихлас күңелле балалар яҙыусыһы ла булып танылды. Ул — ”Шаҡмаҡлы дәфтәр” (1981), ”Яңы күлдәк” (1983), ”Болонда уйнай сәскәләр” (1995) китаптары авторы. Иҫәпһеҙ-һанһыҙ йәмәғәт эштәре, ”Аҡбуҙат” журналының баш мөхәррире вазифаһы, ололар өсөн бер-бер артлы сығып торған шиғыр һәм поэмалар йыйынтыҡтары (”Мәк ялҡыны” — 1980, ”Күҙ ҡараһы” — 1984, ”Йондоҙ асам” — 1987, ”Хлеб да соль” — 1989, ”Сәғәт моңо” — 1991, ”Фатихамды бирәм һиңә” — 1994, ”Камень счастья” — 1998, ”Минең ҡошом Һомай” — 2000), матбуғат биттәрендәге ялҡынлы мәҡәләләре, башлап яҙыусылар менән даими рәүештә алып барған республика семинарҙары, Яҙыусылар союзы идаралығындағы эшмәкәрлеге генә лә Факиһа Туғыҙбаеваның ҙур шәхес булыуы тураһында һөйләй. Өҫтәүенә, ул Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайының Башҡарма комитеты, Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары союзы эшмәкәрлегендә ихлас ҡатнаша.

Факиһаның фатихаһы менән һуңғы йылдарҙа балалар әҙәбиәтендә байтаҡ исемдәр күренде, баҙыҡланды. С.Сурина, Ф.Яхин, И.Тимерханов, С.Кәримов, Ф.Ғөбәйҙуллина, Н.Игеҙйәнова, Г.Яҡупова, Ф.Фәтҡуллина, Л.Абдуллина, М.Йәғәфәрова һәм башҡаларҙың ижад йондоҙҙарын тоҡандырған кеше тип әйтер инем уны. Милләт балаһынан милләт ҡыҙы, милләт инәһе булып танылған Факиһа Туғыҙбаеваның ғүмер юлы йәштәр өсөн үрнәк алырлыҡ, һоҡланырлыҡ бер тәжрибә.

Факиһа Һаҙый ҡыҙы Туғыҙбаева (Нафиҡова) 1950 йылдың 1 ғинуарында Бүздәк районының Бәләкәй Ҡаңны ауылында тыуған. Атаһы

Нафиҡов Һаҙый Мөхәмәтвәли улы уҡымышлы ғаиләнән. Сығышы менән Ҡаңны-Төркәйҙән. Буласаҡ шағирәнең ҡартатаһы ла заманына күрә алдынғы кеше булған, айырым утарҙа йәшәгән, үҙ тирмәне, хужалыҡ техникаһы менән дан тотҡан. Мөхәмәтвәли Нафиҡовты 1933 йылда ҡулға алып, Беломорканалға оҙаталар. Унан ҡайтып өлгөрмәй, Белоретҡа спецпоселениеға ебәрәләр. Аҙаҡ ул Өфө төрмәһендә атып үлтерелә.

Факиһаның атаһы Һаҙый Нафиҡов ауылда беренсе булып шофер һөнәренә уҡып ҡайта, һуғышта ла машина йөрөтә. Сталинградты азат итеүҙә ҡатнаша. Үкенескә ҡаршы, Факиһаға дүрт йәш сағында һуғыш яраларынан вафат була. Әсәһе Саҙиҡа апай сая, уңған, тәүәккәл холоҡло була. Медпунктта, дауаханала санитарка булып йөрөй. Бәләкәй Факиһа ла йыш ҡына әсәһенә ярҙам итә, иҙән йыуыша, йомош-юлын үтәп тора. Хәреф танымаһа ла, зирәк, яҡшы хәтерле, сәсән телле кеше була Саҙиҡа апай. Үҙе генә белгән, үҙе генә ҡулланған әллә күпме тапҡыр һүҙҙәре, ҡыҙыҡлы ләкәптәре, тарихтары, әкиәт, төртмә таҡмаҡтары, ауыл кешеләре тураһындағы ғибрәтле ваҡиғалары оҙаҡ йылдар уның телмәрендә онотолмай һаҡлана.

Факиһа беренсе синыфҡа барғанда уҡ хәрефтәрҙе танып белә. Теүәл фәндәрҙән айырыуса алда бара. ”Уҡытыусыларым минән математик сығыр тип көткәйне, хәҙер аҡса ла һанай белмәйем”, — тип көлә Факиһа. Бер йылды мәктәпкә практика үтергә йәш шағирҙар Барый Ноғоманов менән Самат Ғәбиҙуллин килә. Әҙәби түңәрәк ойоштороп ебәрәләр. Мәҡәлә, шиғырҙар, фельетондар яҙырға өйрәтәләр. Факиһа бер түңәрәк ултырышын да ҡалдырмай. ”Башҡортостан пионеры” (хәҙерге ”Йәншишмә”) гәзитендә уның ебәргән әйберҙәре баҫылып та сыға. Бигерәк тә Самат ағаһының дәрестәрен көтөп ала ҡыҙыҡай. ”Уның ҡыҙыҡ итеп һөйләүе, материалды яҡшы итеп аңлатыуы әле булһа күҙ алдымда тора”, — ти Факиһа. Тырыш кешегә саҡ ҡына юл ярышһаң, артабан, шишмә кеүек, үҙенән-үҙе лә яра бит ул. Факиһаның нәҫерҙәре, мәҡәләләре мәктәптә уҡығанда уҡ ”Башҡортостан” гәзитендә күренә башлай. Ауыл радиоузелынан беренсе шиғырҙарын уҡый.

Мәктәпте миҙал менән тамамлағас, ҡайҙа барырға тигән уй борсомай уны, туп-тура Башҡорт дәүләт университетына юл тота, филология факультетының башҡорт-рус бүлегенә инә. Студент тормошона башкөллө сума, уҡыу алдынғыһы, ”Шоңҡар” әҙәби түңәрәге ағзаһы, староста Факиһа Нафиҡова ижадҡа ла ныҡлап тотона, матбуғатта йыш баҫыла. Бала саҡтан уҡ һалынған эшһөйәрлек бында ла үҙен һынатмай. Университеттың данлыҡлы шиғыр кисәләрен ойоштороусы булараҡ та танылыу ала. Ҡазан, Чебоксар университеттарының йәш әҙәби көстәре менән бәйләнеш урынлаштыра. Йәйҙәрен гәзит-журналдарҙа эшләп ала.

1972 йылда хеҙмәт юлын ”Башҡортостан пионеры” гәзитендә башлап ебәрә. Оҙаҡ йылдар ”Пионер” (”Аманат”) журналында эшләй, редакцияларҙың партия ойошмаһы секретары итеп һайлана. Артабан ”Ағиҙел” журналы эсендә сыҡҡан ”Бәпембә” ҡушымтаһын алып бара, аҙаҡ балалар өсөн ”Аҡбуҙат” журналы ойошторолғас, уның баш мөхәррире итеп тәғәйенләнә. Бына ун йылдан ашыу мәктәпкәсә йәштәге ба-

лалар һәм башланғыс синыф уҡыусылары, ата-әсәләр өсөн иң популяр булып киткән журнал коллективын уңышлы етәкләй. Редакцияла эшләгән күптәр китап сығарыу бәхетенә ирешһә, рәссамдарҙан Майя Зыяи, Глеб Голубев, Азамат Ғарипов, Артур Вәсилов китаптар биҙәүсе оҫталар булып танылды, ә Сулпан Билалова — Шәйехзада Бабич исемендәге премия лауреаты.

Факиһа Туғыҙбаева Башҡортостан Республикаһы Яҙыусылар союзының балалар әҙәбиәте секцияһы рәйесе буларак, тиҫтә йылдар буйына әҙиптәргә үҙ фекерен әйтеп, ярҙам ҡулы һуҙып тора. Егәрлелеге үҙен балалар яҙыусыһы буларак та нык үҫтерҙе. Уның яңы донъя күргән йыйынтығы ”Алтын асҡыс — бүләккә” тип атала. Китапта яҙыусының һуңғы йылдарҙа яҙған уңышлы шиғыр, әкиәт, хикәйәләре урын алған. Бала өсөн алтын асҡыс — уның туған теле. Тел мөғжизәләрен йыйып, үҙ фантазияһы менән байытып, Факиһа бөгөнгө көн балалар донъяһының ғәжәп ишектәрен асырға ынтыла, уларға асҡыс эҙләй. Йыйынтыкты уҡып сыҡҡас, ул асҡыстың меҢ төрлө балҡышы күҙҙе ҡамаштыра, хәтергә уйылып ҡала. Бер уҡығанда ятлап алырлыҡ шиғырҙар күп.

Йыйынтыҡ әкиәттәр менән асылып китә. Автор балаларҙы әкиәт иленә саҡыра, уҡыласаҡ әкиәттәрҙең хикмәтле икәненә ишара яһай:

Һинең өсөн генә, дуҫым,
Сығарҙым мин әкиәт.
Аңлай белгән балаларға
Әкиәттә бар хикмәт.

Әҙәби әкиәт жанры Факиһа Туғыҙбаеваның ижадында үҙенсәлекле бер утрау булып тора. Йыйынтыҡта егерме әкиәт тупланған. Улар ”Аҡбуҙат” журналы аша балаларға күптән таныш. Әкиәттәрҙә традицион геройҙар менән бергә байтаҡ яңы геройҙар ҙа сығыш яһай. Беҙгә бәләкәйҙән таныш ҡайһы берҙәренең ғаиләле булып китеүен дә күрәһең. Мәҫәлән, Туҡай әкиәтендә Былтырҙан алданған Шүрәленең малайы кешеләр янында йәшәп, насар холоҡтарынан арына (”Шүрәле малайы”). Балалар өсөн яҙылған поэзия әҫәрҙәрендә йыш осраған Муйнаҡ, Аҡтырнаҡ, Ҡарас менән Барлас, Тутыйғош, Сиңерткә, Йомран, Йылан, Кәзә, Әтәс, Сыйырсыҡ, Малай янында Елкәнәй, Йоҡо әбей, Быуат бабай һымаҡ яңы персонаждар ҙа бар.

Факиһа Туғыҙбаеваның әкиәттәре ысын мәғәнәһендә заман балалары өсөн тәғәйенләнгән. Ул фольклор геройҙарына мөрәжәғәт итмәй, баланы үҙен уратып алған тормошто әкиәт итеп күрергә өйрәтә. Әкиәткә туйған бөгөнгө балалар өсөн әкиәт яҙыуы ла анһат ҡына эш түгелдер, сөнки телевизорҙан әллә күпме әкиәт ҡарайҙар, китаптарға ла ҡытлыҡ юҡ, теләгәнен һайлап алып уҡы. Факиһа үҙ әкиәттәрендә баланы уйы, уйыны менән күҙ алдына килтергән геройҙарының, образдарының тормошона яҡынайтырға, үҙенән башҡаларҙы ла яратырға, йәлләргә өйрәтә. Уның педагогик бурыстары әллә ҡайҙан аңлашылып тора.

Әкиәт жанрын төркөмләү күҙлегенән ҡарағанда, Факиһа Туғыҙбаеваның әкиәттәренең ерлегән тылсымлы, ғибрәтле, хайуандар тураһын-

дағы һәм көнкүреш әкиәттәргә бүлергә мөмкин. Әммә һәр әкиәттең йөкмәткеһендә традицион әкиәт төрөнән авторса тайпылыу, башҡа төр әкиәттәрҙең элементтарын ҡулланыу бар.

”Муйнаҡ барған баҙарға” әкиәтенең исемен ишетеү менән балала ҡыҙыҡһыныу уяна, тип уйлайым. Баҙарға банан алырға барған эттәр тураһында көн һайын әкиәт уҡып ултырмайҙар уға. Ҡартайған Алабай олатайҙың баҙарға йөрөй алмауы, Муйнаҡ ейәненә банан алырға ҡушыуы, Муйнаҡтың баҙарҙың ҡыҙыҡтарына аптырап, һатыусыларҙан алданып, банан урынына балан, һалам алып ҡайтыуы, һуңынан ҡартатаһының ҡушҡанын нисек булһа ла еренә еткереп ҡуйыуы һүрәтләнә әкиәттә. Банан ашаусы ҡарт этте лә, банан эҙләп баҙарҙа йөрөгән малай этте лә күҙ алдына килтереү ҡыйын булһа ла, бала өсөн яҙылған әҫәрҙең бөтә ҡиммәте ошонда ла инде. Сөнки ул ҡабул ителгән ысынбарлыҡты үҙе шулай бороп уйната, йәнләндерә, кешеләштерә. Был әкиәт композицион йыйнаҡлығы, ваҡиғаларҙың тиҙ алмашыныуы, көлкөлө булыуы менән дә хәтерҙә ҡалырлыҡ. Уның йөкмәткеһен бала үҙ теленә еңел генә күсереп һөйләп бирә ала.

Факиһа Туғыҙбаева әкиәттәрендә балаларҙы донъяның ҡыҙыҡтары, серҙәре менән таныштырыуҙы күҙ уңында тота, шуның өсөн беҙ өйрәнгән милли ерлектәге геройҙар янына Башҡортостанда йәшәмәгән ҡоштар герой итеп алынған. Мәҫәлән, Тауис, Тутыйғош һәм башҡалар менән ”Ҡунаҡ ҡош”, ”Тутыйғоштоң серле буяуҙары” әкиәттәрендә танышабыҙ. Автор бында сит ҡоштар менән таныштырыу өсөн сит илдәргә, ят ерҙәргә алып китә, сәйәхәткә саҡыра. Ҡунаҡ ҡош тауистың ҡыш ҡарарға килеүе, тауыҡтарҙың уға кешенән быйма һорап алып кейҙереүҙәре, төлкөнөң тун, бүренең бүрек биреүе бала өсөн ҡыҙыҡ.

Авторҙың һәр әкиәте ябай ысынбарлыҡтан алынған бер үҙенсәлекле тема менән байытылған. Әкиәттәренең төп мәғәнәһе шунда: хеҙмәтһеҙ бер нәмәгә лә өлгәшеп булмай. Тәбиғәт күренешенә бәйләп алынған ”Елкәнәй — Елдең дуҫы” әкиәте дуҫлыҡҡа таянған эшһөйәрлекте аса, Шүрәле малайы ла әбейгә ярҙам итә-итә яҡшылыҡты алдына ала, ”Булат менән Быуат” әкиәтендә бик мөһим һорауҙарға яуап бар: донъяла иң ҡәҙерлеһе — кешенең ғүмере, иң тәмлеһе — бала, иң ҡиммәте — Тыуған ил.

”Үсегеүсән бер малай” әкиәтенән нимәгә өйрәнергә мөмкин һуң? Донъяла иң танылған әкиәттәрҙән билдәле булыуынса, әкиәттә кешенең насар яҡтарын тәнҡитләйҙәр: ялҡаулыҡ, ҡурҡаҡлыҡ, убырлыҡ, һаранлыҡ, көнсөллөк; һәм, киреһенсә, батырлыҡ, уңғанлыҡ, тоғролоҡ, эшһөйөүсәнлек маҡтала. Үсегеүсән малайҙың исеме лә ҡуйылмаған, сөнки әкиәт башланғанда автор балаларҙы ҡыҙыҡтырырлыҡ һорау ҡуя: ”Ундай үсексән балалар юҡмы һуң һеҙҙең өйҙә?” Ундай малай нисек була икәнен кемдең белгеһе килмәһен инде. Баланың күлдәгенең тиҫкәре яғын кейеүе, ашарға теләмәүе, тауыҡтарға ем һипмәүе, битен йыумауы — була торған хәл, ә бына әсәһенең малайға үсегеп бер ни эшләргә теләмәүе шаҡ ҡатырлыҡ ҡыҙыҡ: ашарға бешермәй, үҙе уйнарға китә, малайына китап уҡырға ҡуша. Малай асыға, йонсой, аптырай. Әсәйҙәр үсекһә, бик ҡыйын була икән дә. Ярай әле, әсәй кеше оҙаҡ

үсегеп йөрөмәй, тиҙ төҙәлә. Өсөнсө көн тигәндә малай ҙа ыңғайланып, яҡшырып китә. Тормошта әсә балаһына үсекмәүе лә ихтимал, ә әкиәтте уҡып сыҡҡас, бала менән ошо турала әңгәмә алып барһаң, уға байтаҡ нәмәләрҙе төшөндөрөргә, ҡыйыш атып, тура тейҙерергә мөмкин. Факиһаның әкиәт сәнғәте конкрет һәм аңлайышлы бында. Тәрбиәүи фекере лә конкрет поэтик образға бәйләп бирелә. Бындай образды театрлаштырып уйнарға ла мөмкин. Абстракт фекерҙе уйнап булмай. Әкиәт яҙыусының төп бурысы ла шунда: образды уйын кимәленә еткереп үҫтерә белеү. Сөнки балалар өсөн яҙғанда уларҙы актер, үҙеңде режиссер тип күҙ алдына килтерергә кәрәк. ”Үсегеүсән бер малай” — авторҙың иң уңышлы әкиәттәренең береһе.

Баланың тормошо уйындан айырылғыһыҙ, уның өсөн уҡыған әкиәт тә, ҡыҙыҡлы шиғыр ҙа, өйрәнгән йыр ҙа, тормошта күргән әйберҙәр ҙә көндәлек уйынға, мауыҡтырғыс тамашаға әйләнә. Уның уйыны баланың үҙе өсөн ҡоролған сәхнә тормошона әүерелә. Бала бер үҙе генә лә әллә нисә образға инеп уйнай ала. Үҙен башҡалар образында күрергә теләү баланың 2—3 йәштән үк башлана торған тәбиғи ынтылышы. Бала фантазияһы образдарҙың битлектәрен дә күҙ алдына килтерә, шуға ул геройҙарҙың кейемдәрен, ваҡиғалар барған шарттарҙы, йәғни декорация, гримды, реквизиттарҙы ла уйлап уйнай. Уның ихласлығын иң бөйөк артистар ғына ҡабатлай алыр кеүек. ”Концерт ҡуя сиңерткә”, ”Ҡарас менән Барлас”, ”Һаулыҡхандың дуҫтары”, ”Муйнаҡ барған баҙарға”, ”Гөлназ менән Йоҡо әбей” әкиәттәре бала өсөн тамаша уйындар ҡорорға мөмкинлек бирә. Шулай уҡ ҡайһы бер әкиәттәр донъяла ”нимә ни өсөн?” ”нимә ҡайҙан килеп сыҡҡан?” һорауҙарына яуап рәүешендә яҙылған. ”Икмәк һала йомран” әкиәтендә йомрандың икмәкте борсаҡ, тары, һоло, арыш, бойҙайҙан һалыуын белә бала. Әкиәттәрҙең хикмәте донъяны танырға, яратырға, хыялланырға өйрәтеүҙә икән.

Факиһа Туғыҙбаева әкиәттәре баланың күңелен асыуҙы маҡсат итеп ҡуймай, ә уның күҙен асыуҙы уйлап яҙылған. Күҙе асылғандың күңеле лә асыла.

Икенсе бүлектә төрлө тематикаға яҙылған шиғырҙар тупланған. Факиһаның шиғри баҡсаһында үҫкән гөлдәрҙең нурҙары — ысын мәғәнәһендә юғары шиғриәт талаптарына яуап биргән балҡышлы гөлләмә. Башҡорт теленең фонетика, лексика, орфоэпия, грамматикаһы шиғри телдә бик тә аңлайышлы һәм ҡыҙыҡ икән. Балаға ғәжәп хәлдәрҙе тасуирлаған шиғри әкиәттәрҙән һуң донъялағы тағы бик күп ҡыҙыҡ һорауҙарға яуап табырға була был гөлләмәлә. Шиғырҙар тематик яҡтан төркөмләп бирелгән, шуның өсөн уларҙы уҡыуы ла, аңлауы ла бик уңайлы: ”Күңелле хәрефтәр”, ”Тәмле шиғырҙар”, ”Әҙәпле һүҙҙәр”, ”Туҙға яҙмаған шиғырҙар”, ”Туған телең — башҡорт теле”, ”Хәйләкәр һандар” һ.б.

Хәрефтәр сере аша донъя сере нисегерәк асыла икән? Уңышлы алым — хәрефтәр донъяһына сәйәхәт, балалар яратҡан билдәле һанашмаҡтар, тиҙәйткестәр ҡулланыу. Һәр хәрефкә яҙылған шиғыр үҙе бер ҡыҙыҡ сюжетҡа ҡорола. Хәрефтең портреты бар, тауышы ишетелә, холҡо асыла.

Артабан ”Хәйләкәр һандар” бүлеге балалар өсөн баш ватырға, эҙләнергә этәреп, мауыҡтырғыс уйын кеүек бирелә. Факиһа Туғыҙбаева арифметик ғәмәлдәргә иғтибар иткән. Бына нисек уның бала саҡтағы математик һәләттәре килеп асыла. Ҡушыу, алыу, ҡабатлау, һанау тәртибен ябай ғына итеп күҙ алдына килтереү, аңлау өсөн башҡорт телендә ни тиклем һүҙ байлығы йәшеренеп ятҡан. Һандарға рифмалар уңышлы килеп сыҡҡан: бер — ер, шикле — ике, көслө — өслө, дүрт — үрт, бишле — ишле, алтын — алты, етте — ете, һигеҙ — игеҙ, туғыҙ — уғыҙ, тун — ун. Һәр һан үҙенең әкиәт илендә мажараларға, ҡыҙыҡлы хәлдәргә тарып, рәхәтләнеп йәшәп ята икән. Улар маҡтана ла, үсекләшә лә, алдаша ла, арбай ҙа белә, хатта ҡунаҡҡа ла саҡыра. Мәҫәлән:

Тун эсендә бик йылы,
Тун эсендә, әйҙә, ҡун.
Ышанһаң — ышанмаһаң да,
Тун эсендә йәшәй ун.

Мәсьәлә-шиғырҙар ҙа ялҡытҡыс аңлатыу-һөйләүгә ҡоролмаған. Таныш геройҙар, көлкөлө ситуацияларҙа тап үҙенсә йәшәй бирә. Тегенсе төлкө әзмәүерҙәй айыуға (ул һаман да бер ҡатлы, аңғыраҡ, ышанып ҡына бара) бер тиренән тун тегергә маташа, ”сант+метр” төшөнсәһе аңлатылып кителә; һөт эсеүсе Ҡара бесәй менән Аҡ бесәйҙең ҡайһыһы убырыраҡ икән тип баш ватаһы юҡ, Аҡ бесәй икәне билдәле, әммә быны нисә тапҡыр аппетиты ныҒыраҡ икәнен һанап сығарғас ҡына белергә була. Был бала өсөн бик ҡыҙыҡ һәм мөһим, үҙе һанай белмәһә, ололарҙан ярҙам һорап булһа ла Аҡ бесәйҙең күпме һөт эскәнен беләсәк.

”Нисә һарыҡ, нисә сарыҡ?” шиғыры һүҙ уйнатыуға ҡоролған, ”һарыҡ” һүҙе бала өсөн бик еңел аңлашылһа ла, ”сарыҡ” һүҙен уның белмәүе ихтимал. Әммә сарыҡ кейгән һарыҡ шул тиклем көлкө, шул тиклем ҡыҙыҡ, уның нимә икәнен һорап белмәйенсә, күҙ алдында килтермәйенсә, бала тынyслана алмаясаҡ. Көндәлек тормошта кейеп күнегелгән әйбер булмаһа ла, шундай уңайлы боронғо аяҡ кейеме булыуын хәтерҙә ҡалдырыу өсөн ошондай һүҙ уйнатыу менән һүҙлек эше бирелеүе урынлы. Телдә ”иҫкергән” һүҙҙәр булмай, бәлки, тормошта иҫкергән әйберҙәр булыуы ғына ихтималдыр. Юҡһа, беҙ ғалимдарҙың лексикала һүҙҙәрҙе ҡулланылыу яғынан төркөмдәргә бүлеүен иҫтә тотоп, башҡорт халҡының көндәлек тормошонда ҡулланылған ғәжәп матур һүҙҙәрҙе онотоп барабыҙ, йөҙ тапҡыр ҡабатланған һүҙҙәр менән яҙырға ятабыҙ. Баланың ҡолағы шиғырҙағы һүҙҙәргә ҡарп итеп ҡалырға тейеш. Автор тап шундай маҡсат ҡуйып эш итә. Шиғырҙың оҫта ҡәләменән төшөүе әллә ҡайҙан күренә.

Йыйынтыҡта тупланған шиғырҙар ысын мәғәнәһендә башҡорт балаһына ҡыҙыҡлы шиғри грамматика итеп яҙылған. Факиһа Туғыҙбаева ҡыҙыҡлы тел күренештәрен аңлатыуға тос ҡына өлөш индерә. Лексик, грамматик, фонетик омонимдар баш ҡатырмай ғына зиһенгә барып етерлек итеп бирелгән. Шулай уҡ киң билдәле ”яҙыу” (май яҙыу, бил яҙыу, хат яҙыу), ”ҡара” (тотоп ҡара, була ҡара), ”теймә — төймә” кеүек күренештәр Факиһаса ғына уйнап уйландыра.

Теймә
Төймә күҙле
Тейенгә.
Тейен
Сәтләүеккә
Тейенгән.

*(”Тейен”)*

Тағы ла бер уңышлы шиғырға мөрәжәғәт итәйек:

Әсәй, миңә ал ҡата,
Эй, әйткәнем бит хата.
Кәрәкмәй миңә ҡата,
Ҡатала аяҡ ҡата.

*(”Ҡыҙыл быйма”)*

Балалар өсөн тәғәйенләнгән шиғриәттә бөтөнләй ҡуҙғатылмаған һүҙ байлығы ҡатламдары ла урын алған шиғырҙарҙа. Йылҡысылыҡ терминдары — ғилми эҙләнеүҙәр талап иткән мауыҡтырғыс лексик күренеш, үкенескә ҡаршы, бөгөн уны балалар ғына түгел, ололар араһында ла көндәлек тормошта белеп, яңылышмай әйтә алырлыҡ кешеләрҙе осратыуы ҡыйын. Бала үҙе яратҡан йорт хайуаны тураһында ”ат” тигәндән башҡа бер һүҙ ҙә әйтә алмай. ”Аттар — ҡунаҡтар” шиғырында ”ҡонан — ҡонажын”, ”дүнән — дүнәжен”, ”ҡолон, ҡолҡай, ҡолоҡай, ҡолоҡас, ҡолонсаҡ”, ”ҡырҡмыш”, ”ябаға”, ”айғыр”, ”байтал — бейә”, ”тай — тулаҡ” терминдары ҡунаҡ уйыны сюжеты аша ябай ғына итеп асыла.

Тел сарлағыс — тел төҙәткес жанрында башҡорт балаһы өсөн ауыр әйтелешле рус теленән индерелгән һүҙҙәрҙә ҡулланылыусы ”ч”, ”щ”, ”ш” фонемаларына миҫалдар ҙа урынлы һәм файҙалы (”Шаһиншаһ менән Шаһинә”). Башҡорт телендәге тартынҡы өндәрҙең бала ҡолағына инеп һалынырға тейешле бик күп үҙенсәлекле күренештәре шиғырҙарҙа бәләкәй генә сюжетлы тормош күренештәре аша бер һөйләм рәүешендә күҙ алдына баҫа. Шулай уҡ фразеологик берәмектәр (ҡолағым тондо — талды, баш ватты), сағыштырыуҙар (йоҙаҡ — тоҙаҡ) һәм башҡаларҙы ҡулланыу, уларҙың мәғәнәһен асыҡлау шиғырҙарҙы уҡымлы һәм ҡыҙыҡлы итә.

Телебеҙҙәге ҡушма һүҙҙәр бала өсөн үҙе бер серле йомаҡ. Ни өсөн ҡоштоң — ”аҡ ҡош”, яулыҡтың — ”ҡушъяулыҡ”, ”ҡулъяулыҡ” булыуы һәр ваҡыт баланың аңында һорау тыуҙыра. Факиһа бындай күренеште лә еңел рифмаға ҡоролған шиғри юлдар аша асып бирә.

Төҫтәрҙе айырыу, уларҙы атап әйтә белеү теле асылып килгән бала өсөн ҡатмарлы ғына күренеш. Беҙ уларға нимә ниндәй төҫтә булыуын, тормошта нисек бар шулай тип аңлатырға күнеккәнбеҙ, зәңгәр — зәңгәр, ҡыҙыл — ҡыҙыл. Факиһа был осраҡта ла бала менән шаярып һөйләшеүҙе, уны яңылыш әйтеп, дөрөҫлөктө танырға, хәтерҙә ҡалдырыуға йүнәлтә. ”Зәңгәр алма” булмағанын бала белмәйме ни? Белә. Бала хатаны белгәне менән төҙәтергә ярата, һуңынан шатлана, маҡтау көтә. Шуға ”ҡыҙыл ҡыяр”, ”аҡ помидор”, ”алһыу борсаҡ, ”һары сейә”, ”йәшел күк” тигән һүҙҙәрҙе ишеткәс, ҡыуана-ҡыуана яңылыш яҙған шағирә апайҙы төҙәтә башлай.

Башҡорт теленең орфоэпияһы менән орфографияһы бала уҡый-яҙырға өйрәнгәнсе үк ҡолағына инә башларға тейеш. Дөрөҫ яҙыу, дөрөҫ һөйләү дөрөҫ ишетеүгә нигеҙләнә. Тел өйрәнгәндә балаға үҙләштереүе ауыр, хәтерләмәй тип аҡланырға тырышыу урынһыҙ. Балаға бөтә нимә лә ҡыҙыҡлы, тик ҡыҙыҡтыра белергә кәрәк. Факиһаның байтаҡ шиғырҙары ошо йәһәттән ата-әсәгә балаһына телде өйрәтеүҙә ярҙамға килә ала. "Мәрәкә хәрефтәр" шиғырында "уы", "үе", "ң", "я", "б—в" өндәренең әйтелештәре һәм яҙылыштары балаға беренсе орфоэпик ҡағиҙәләрҙе иҫтә тотоуға миҫал булып тора.

Йыйынтыҡҡа тупланған бөтә шиғырҙарға айырым баһа биреп, уларҙың юғары зауыҡлы китап уҡыусы тәрбиәләүҙәге роле тураһында бик күп итеп яҙырға ла булыр ине, уны китап уҡыусы үҙе лә аңлай ала, тип уйлайым. Әммә был "шиғри энциклопедияның" милли телгә өйрәтеүҙә ниндәй мөһим урын тотасағын, бер һүҙһеҙ, ҙур шатлыҡ менән танырға мөмкин. Һәр хәлдә, байтаҡ бала китап биттәренән үҙен таныясаҡ, яҡшы яғына шатланыр, насар яғы булһа — төҙәтер тип ышанғы килә. Йырлап ҡына торған нурлы болон сәскәләре (мәтрүшкә, ҡылған, бәпембә, ҡыңғырау), үгеҙҙе һөҙөп йыҡҡан кәзә, мәктәпкә әҙерләнгән өйрәк, һары күлдәгенә маҡтанған себеш, Муйнаҡҡа ҡунаҡҡа йыйынған әтәс, ололар менән дә, үҙ-ара ла аралашҡанда бик кәрәкле тылсымлы һүҙҙәр — зинһар, рәхмәт, ғәфү ит, һаумыһығыҙ — мотлаҡ бала тормошона инеп китәсәк. Улар бала зиһенендә сағылып, уның уйындарында яңы формала тыуасаҡ.

Шиғырҙарҙың бала өсөн яҡын, йәнәш рифмаларға ҡоролоуы (ҡарасы — тамсы, бәләкәс кенә — күләкәс кенә, ҡарҙы — ярҙы, ҡаҙҙар — яҙҙар һ.б.), ул рифмаларҙың баланың үҙен уратып алған донъянан килеп инеүе Факиһа Туғыҙбаева шиғриәтенең баһаһын күтәрә, уны тормошсан, заманса яһай.

Өсөнсө бүлектә сәсмә тел менән яҙылған әкиәттәр, хикәйәләр урын алған. Әкиәттәрҙә лә, хикәйәләрҙә лә тылсымлы донъя, балаға ошо донъяны танытырға, уға үҙен танырға, табырға өйрәнеүҙә ярҙам итергә тырыша автор. Әкиәттәр янында хикәйәләр булыуы бик маҡтаулы, сөнки бала өсөн тормошсан хикәйәләр ижад итеlә. Хикәйә геройҙарының үҙҙәре лә, исемдәре лә таныш. Әлеге көндә популяр исемдәр алыныуы ла балала хикәйәләрҙе тыңларға, уҡырға теләк тыуҙыра. Бала үҙ исеме менән яҙылған әйбергә бер ваҡытта ла битараф булмай. Факиһаның халҡыбыҙ араһында киң таралған матур исемдәргә мөрәжәғәт итеүе юҡҡа түгел, сөнки йәш ата-әсәләр һуңғы ваҡытта популяр сериалдарҙан алып исем ҡушыуҙы модаға индерә башланы. "Өс Джек" хикәйәһе тап ошо күренеште тәнҡитләй ҙә инде.

Ғөмүмән, бала өсөн яҙылған әйбер балаға белем дә бирә, тәрбиәләй ҙә. Был йәһәттән Факиһа Туғыҙбаева донъя тураһында әҙәби дәреслек яҙған. "Алтын асҡыс — бүләккә" китабы ысын мәғәнәһендә бала күңеленә юлдар таба алырлыҡ алтын асҡыс була ала. Бик һөйөнөслө хәл. Башҡорт балалар әҙәбиәтендә тағы ла бер заман балаһына тәғәйенләнгән заманса китап тыуған. Был китап беҙҙең киләсәк быуынды белемлерәк тә, тәрбиәлерәк тә, кешелеклерәк тә итеп үҫтерергә ҙур ярҙамсы булыр тип ышанам.